Зөһрә АЛТЫНБАЕВА

# Белем һәм тәрбиә усағы

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары башҡалабыҙ Өфөнән алыҫ урынлашҡан, башҡа ҡалаларға ла ара яҡын түгел. Шуға күрә лә Мәсәғүт педагогия училищеһы был төбәк өсөн 70 йылдан артыҡ уҡытыусылар, тәрбиәселәр әҙерләү үҙәге булып тора.

1907 йылда ойошторолған ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы нигеҙендә асылған был абруйлы уҡыу йорто бик күп егеттәргә һәм ҡыҙҙарға тормош юлына путевка биргән. Гимназияны тамамлаусы ҡыҙҙар «Халыҡ уҡытыусылары» тигән маҡтаулы һәм мәртәбәле исемгә эйә булған. 1910 йылда гимназияла тәрбиәләнеүселәрҙең профессиональ әҙерлеген яҡшыртыу маҡсатында бында ике йыллыҡ уҡытыусылар курсы ойошторола. Ошонда уҡ ҡатын-ҡыҙҙар башланғыс мәктәбе лә эшләй башлай. Мәктәптә уҡырға теләүсе һәр кем белем алыу хоҡуғына эйә булған. Бына шулай ярлы балалары өсөн белем донъяһына юл асыла. Артабан гимназия элек колледж урынлашҡан ике ҡатлы бинаға күсә.

Әммә төрлө сәбәптәр менән 1918 йылдың апрелендә гимназия ябыла.

Революциянан һуң халыҡ араһында наҙанлыҡты бөтөрөү, мәҙәни кимәлен күтәреү бурысы ҡуйыла. Шуға күрә БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы 1928 йылда, Мәсәғүт педагогия техникумын дәүләт бюджетына алыуҙы һорап, РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советына мөрәжәғәт итә. Һөҙөмтәлә 1928-1929 уҡыу йылдарында педагогия курстары нигеҙендә Мәсәғүт педагогия техникумы асыла. Уҡытыусыларға педагогик белем биреү өсөн ситтән тороп һәм экстерн бүлектәре лә эшләй башлай.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла, төрлө ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, техникум үҙ эшмәкәрлеген дауам итә, уҡытыуҙың өр-яңы формалары индерелә. Мәҫәлән, һуңғы курста уҡыусыларға уртансы синыф мәктәп балаларын башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте, физкультуранан уҡытыу өсөн факультатив рәүешендә өҫтәмә белем бирелә башлай.



*Мәсәғүт педагогия колледжы*

1929-1940 йылдарҙа Мәсәғүт педтехникумын 641 уҡыусы тамамлап сыға.

1949 йылда иһә техникум Мәсетле уҡытыусылар институты булып әүерелә һәм унда ике бүлектә юғары һәм уртансы синыфтар өсөн физика-математика, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары әҙерләнә.

Илебеҙ тарихындағы беренсе ауыл институты була ул һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәктәрендә тәрбиәүи һәм мәҙәни үҙәк булараҡ танылa. Институт талиптары ауылдарға йөрөп докладтар, лекциялар, концерттар, спектаклдәр менән сығыш яһай. 1957 йылда институттың һуңғы сығарылышы булып, ул ҡабат педагогия училищеһы итеп тергеҙелә. Ошо ваҡыттан алып унда яҡын-тирәләге бөтә районлар өсөн башланғыс синыф уҡытыусылары әҙерләнә. Ул ғына ла түгел, 60—70-се йылдарҙа педучилищела Бүздәк, Балтас, Учалы, Әлшәй һ.б. райондарҙан да килеп уҡыусылар байтаҡ ине.

Тап ошо йылдарҙа педучилищела үҙ эшенә йәне-тәне менән бирелгән уҡытыусылар: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, әҙәби түңәрәкте етәкләүсе, күңелдәрҙә илһам уятыусы Сафура Шәмсетдин ҡыҙы Миһранова, рус теле һәм әҙәбиәте, педагогика уҡытыусыһы, талиптарҙың мәктәп практикаһына етәкселек итеүсе Марат Әбдрәфиҡ улы Нафиҡов һ.б. эшләне.

1997 йылдың 1 сентябренән училище Мәсәғүт педагогия колледжы статусын алды. 1976 йылдан бирле училищела мәктәпкәсә йәштәге балаларға тәрбиә биреү бүлеге эшләп килә. Ошо ваҡыт эсендә бында 1300-ҙән ашыу балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе әҙерләнгән.

Мәктәп бүлегендә 353 талип белем алып, башланғыс синыфтарҙа һүрәт төшөрөү, музыкаль һәләттәрен үстереү, физик культура, сит ил теле һәм хеҙмәт дәрестәре уҡытыусылары әҙерләнә.

90 талип мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы уҡытыу бүлегендә, музыкаль тәрбиә, һүрәт төшөрөү һәм физик тәрбиә биреү бүлектәрендә белем ала. Уҡытыусылары Л.Ғәбитова, Г.Вәлишина, Э.Мәүлетова, О.Мөхәмәтова, Р.Исламовалар ҡыҙҙарҙы ихлас рәүештә өйрәтә, оҫта һәм уңған тәрбиәсе, абруйлы уҡытыусы булыу серҙәренә төшөндөрә.

Талиптарҙы 60 уҡытыусынан торған коллектив уҡыта, уларҙың һигеҙе — Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, 23-ө Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы тигән абруйлы исемгә лайыҡ, 17 уҡытыусы — юғары категориялы, 34-е 1-се категорияға эйә. Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк, колледжда үҙ эшен ысын күңелдән үҙ иткән, йәш быуынды яратҡан педагогтар эшләй. 48 уҡытыусының бында тиҫтә йылдан артыҡ эшләүе ошоно асыҡ раҫлай. Колледж талиптарының белем кимәле юғары булыуы, был уҡыу йортонан ныҡлы белем алып сығыуы ла ошо хаҡта һөйләй.

Уҡытыусылар коллективы хаҡында һөйләгәндә уның тәжрибәле, йәштәргә өлгө булып торған ветерандарын атап китеү урынлы: Л.И.Шаповалова, В.Р.Минһажева, Н.С.Киселева, Н.И.Дневалова, А.З.Моратшина, В.В.Кәримова, Н.В.Зырянова, Г.Ф.Яруллина, Л.М.Купряхина һ.б.

Мәсәғүт педагогия колледжында йәш быуынды һәр яҡлап үҫтереүҙе маҡсат итеп алған шәхестәрҙе тәрбиәләргә ынтылалар. Талиптарҙың дәрестән тыш ваҡытын файҙалы итеп үткәреүгә ҙур иғтибар бирелә. Киләсәктә кескәйҙәр менән эшләү өсөн махсус фәндәрҙе өйрәнеү генә аҙ икәнен аңлай улар. Төрлө мәҙәни саралар, уйындар уларға киләсәктә ярҙам итәсәк. «Минең һөнәрем — уҡытыусы», «Изгеләр көнө», «Дуҫлыҡ байрамдары», КВНдар үткәреү матур традицияға әүерелгән.

В.Минһажева етәкләгән «Аҡ тирмә» клубын иһә һәр саҡ маҡтап телгә алалар бында. Ул тыуған төйәгебеҙ, халҡыбыҙ тарихы, уның бөгөнгөһө һәм киләсәге, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырыу, уларҙы тергеҙеү буйынса ҙур эштәр атҡара. Клубтың эшмәкәрлеге күп яҡлы: төрлө конкурстар ойоштороу, юбилейҙарға арналған кисәләр, күренекле шағирҙар һәм яҙыусылар менән осрашыуҙар, шиғыр бәйгеләре үткәрелә. Әйткәндәй, уҙған йыл әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы, халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 80 йәшлек юбилейына арналған «Ҡоштар осорам» тигән шиғыр бәйгеһе ысын мәғәнәһендә оло байрамға әүерелде.

Колледжда уҡыусылар республикабыҙҙың күренекле әҙиптәре менән яҡшы таныш. Шағир Тимер Йосопов, шағир һәм публицист Рәшит Шәкүр, Башҡортостан журналистар союзы рәйесе Марсель Сәлимов, фольклорсы-ғалим Әхмәт Сөләймәновтар менән осрашыуҙар талиптар күңелендә йылы тәьҫораттар ҡалдырҙы.

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әнүәр Хәким улы Шафиҡов етәкселек иткән «Дуҫлыҡ» бейеү ансамблен районда ғына түгел, унан ситтә лә яҡшы беләләр. Унда шөғөлләнгән талиптар төрлө халыҡтар сәнғәте менән яҡындан таныша.

Әлбиттә, педколледж коллективы уңайлы йәшәү шарттары булдырыуға ҙур иғти-

бар бирә. Сөнки бында Башҡортостан ғына түгел, Свердловск, Силәбе, Төмән өлкәләренән килгән талиптар ҙа бар. Уңайлыҡтары булған 3 дөйөм ятаҡ ситтән килеп уҡыусыларҙың ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә. Колледж ашханаһында талиптарҙы көнөнә өс тапҡыр ашатыу ойошторолған. Уҡыу йорто йыл әйләнәһенә үҙен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә. Педколледждың ярҙамсы хужалығында етерлек йәшелсә-емеш үҫтереп алына. Шуға күрә ашханала төрлө йәшелсә салаттары, аштары менән һыйлайҙар. Әлеге ҡиммәтселек заманында етәкселәрҙең оҫта хужалыҡ итеүе талиптарҙың финанс йәһәтенән хәлдәрен еңеләйтә.

2000 йылда Мәсәғүт педагогия колледжы үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын билдәләп үтте. Ошо йылдар эсендә уның исеме лә төрлөсә үҙгәрештәр кисерҙе, әммә асылы үҙгәрмәне — ул һаман да уҡытыусылар, йәш быуынды тәрбиәләүселәрҙе әҙерләй. Гимназия, техникум, училище, институт, колледж — нисек кенә аталмаһын, был уҡыу йортон тамамлаусылар республикабыҙҙа ғына түгел, илебеҙҙең башҡа бик күп мөйөштәрендә лә лайыҡлы кеше булып ҡала. Мәҫәлән, педучилищены 1967 йылда тамамлаған Ғәли Биктимер улы Фәйезов Башҡортостан Республикаһы Президенты хакимиәтенең социаль-мәҙәни үҫеш бүлеген етәкләй, 1969 йылда тамамлаған Зилә Шәүкәт ҡыҙы Яппарова — Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығында бүлек мөдире; Имбер Яппаров — география фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты доценты; Вәлиәхмәт Бәҙретдинов — психолог, әлеге көндә Дәүләт Йыйылышы—Ҡоролтайҙың Закондар сығарыу палатаһы депутаты; Зөһрә Алтынбаева — «Ватандаш» журналының бүлек мөхәррире, Рәмилә Йомағужина Конституция Судында ҡабул итеү бүлеген етәкләй, Лилиә Ниғмәтуллина Өфө ҡалаһы халыҡ мәғарифы идаралығында методист булып эшләй.

Педучилищены тамамлаусылар араһында Геройҙар ҙа бар. Бына улар: С.А. Михляев — Советтар Союзы Геройы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы; Х.С.Искәндәрова — Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы; Ҡ.Ҡ.Латипов — Советтар Союзы Геройы.

Лирун Зәки улы Нәжипов етәкләгән колледж киләсәккә ҙур өмөттәр менән йәшәй. 1999 йылда бында БДПУ-ның «Педагогика һәм психология», «Рус теле һәм әҙәбиәте», «Башланғыс мәктәптәрҙә педагогика һәм методика» бүлектәренең филиалдары асылған. БДУ һәм БДПУ менән килешеү нигеҙендә теләктәре булған уҡыусылар артабан институтҡа һәм университетҡа әҙерләнәсәк. Әле юғары уҡыу йорттарынан уҡытыусылар, ғалимдар килеп лекциялар уҡыйҙар, әҙерлек йыл әйләнәһенә дауам итә. Артабан колледжды тамамлаусылар имтихандар һөҙөмтәһендә үрҙә аталған уҡыу йорттарына 3-сө курсҡа уҡырға инә аласаҡ.

Бында эш «мәктәп—колледж — юғары уҡыу йорто» системаһы буйынса атҡарыла. 1998 йылда БДПУ-ның рус теле һәм әҙәбиәте, башланғыс синыфтар уҡытыусыларын әҙерләү бүлектәренә 25-әр кешенән торған өс төркөм, 2000 йылда 2 төркөм ойошторолған. Башҡаланан алыҫта урынлашҡан төбәк өсөн был бик мөһим, сөнки уҡырға инергә теләүселәрҙең күбеһе ошо арҡала артабан уҡый алмай. Ә 3-сө курсҡа алыныу мөмкинлеге күптәргә юл аса.

Лирун Зәки улының колледж нигеҙендә юғары уҡыу йорто асырға ла ниәте юҡ түгел. Әммә ауыл ерендә мөмкинселектәр сикләнгән булыуы ҡамасаулай. Әле колледжда уҡытыу-консультация үҙәге эшләй һәм унда 85 кеше шөғөлләнә.

Әлбиттә, колледжды институтҡа әйләндерергә ынтылыу бик ыңғай күренеш. Ҡасандыр институт булараҡ үҙен аҡлаған был уҡыу йорто төньяҡ-көнсығыш райондарҙа йәшәгән башҡорттар өсөн бик тә файҙалы булыр ине.

1997 йылда ошо төбәктә сит тел уҡытыусылары етешмәгәнлекте күҙаллап, башланғыс һәм урта синыфтар өсөн сит тел уҡытыусыларын әҙерләү бүлеге асылған. Был эштә Башҡорт дәүләт педагогия институты ҙур ярҙам күрһәткән. Тимәк, бер-нисә йылдан төбәктең сит тел уҡытыусылары кадрҙарына ихтыяжы ҡәнәғәтләндереләсәк.

Илдә барған иҡтисади ҡыйынлыҡтар колледжды ла урап үтмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан коллектив ҡаушап ҡалмаған, көрсөктән сығыу юлдарын даими эҙләй, яйлап матди база ла нығытыла. Әлбиттә, һәр эштә район хакимиәте ҙур ярҙам күрһәтә. 1999 йылда 204 урынлыҡ яңы дөйөм ятаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Әле колледж директоры Л.З.Нәжипов төп бинаға төкәтмә төҙөү мәсьәләһен хәл итергә тырыша, сөнки уҡытыу өсөн майҙан етеңкерәмәй. Киләсәктә тағы ла өҫтәмә һөнәрҙәр буйынса бүлектәр асырға ла ниәттәре бар. Әлеге лә баяғы шул финанс мәсьәләһе — проекты 1998 йылда уҡ әҙер булһа ла, хыялдары тормошҡа аша алмай. Шулай ҙа төҙөлөштөң башланасағына өмөт бағлай колледж директоры. Был белем усағының аҙымдары ышаныслы, ырамлы булыуы ҡыуандыра.